БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА В УСЛОВИЯХ ГЛОБАЛИЗАЦИИ И ПОЛИЭТНИЧЕСКОЙ СРЕДЫ: ОПЫТ И ПЕРСПЕКТИВЫ

ISBN 978-5-91608-181-7 С.252-255

https://doi.org/10.31833/conf_ihll2019.049

УДК 81.373.21:811.512.141

**Г. Ә. Назарова**

*МБОУ СОШ с. Татыр Узяк Хайбуллинского района*
*ул. Советская, 44, с. Татыр-Узяк, Хайбуллинский район, Россия*
*E-mail: nga555@mail.ru*

# ТЕЛМӘР – ТЕЛДЕҢ ЙӘШӘЙЕШЕ

В статье рассматривается вопрос развития речи в процессе обучения. Выделяются проблемы развития речи у обучающихся, основные причины и пути решения. Автором описывается несколько видов работ и задач для использования на уроках башкирского языка в целях развития речи.

*Ключевые слова:* башкирский язык, родной язык, речь, развитите речи, обучение.

Телмәр телдәге өндәрҙе, һүҙҙәрҙе файҙаланып, уйлау, фекерләү, шул фекерҙе әйтеп биреү, йөкмәткене башҡаларға еткереү, хәбәр итеүҙе эсенә ала.

Күп уҡыусылар кәрәкле материалды һайлай белмәй, системаға һала алмай, шуға иншаларҙа фекер әйтеүҙә эҙмә-эҙлеклелек юғала, ҡабатлауҙар, бәйләнешһеҙ һөйләмдәр күҙәтелә. Был факттар текст төҙөү төбөндә ятҡан, коммуникатив аталған принципты махсус эшкәртеү, үҫтереү хаҡында һөйләй.

Белеүебеҙсә, бөгөнгө көндә уҡыусыларҙы бәйләнешле телмәр төҙөргә өйрәтеү актуаль проблемаларҙың береһе булып һанала һәм уны хәл итеү өҫтөндә төрлө эштәр башҡарыла. Ләкин был сараларҙы әле етерлек кимәлдә тип әйтеп булмай.

Телмәр – телдең йәшәйеше, йәшәү формаһы, ҡулланылышы, телде файҙаланыу процесы.

Телмәр термины ике мәғәнәлә ҡулланыла:

а) телмәр - кешенең аралашыу эшмәкәрлеге һәм

б) телмәр – ошо эшмәкәрлектең һөҙөмтәһе, текст.

Телмәр телдәге өндәрҙе, һүҙҙәрҙе файҙаланып, уйлау, фекерләү, шул фекерҙе әйтеп биреү, йөкмәткене башҡаларға еткереү, хәбәр итеүҙе эсенә ала. Былар эшмәкәрлек һөҙөмтәһендә ниндәй ҙә булһа мәғәнәле йөкмәтке, текст төҙөлә.

Телмәр барлыҡҡа килһен өсөн, аралашыу, фекер әйтеү теләге, ихтыяжы, аралашыусы каналы (ишетеү, күреү, һөйләү һәм яҙыу), аралашыуҙың конкрет ситуацияһы булырға тейеш.

Телмәр төҙөү – индивидуаль күренеш. Кеше ысынбарлыҡты, ваҡиғаларҙы, предметтарҙы, күренештәрҙе төрлөсә аңлай, улар тураһында төрлөсә фекер йөрөтә. Һәм үҙ

фекерҙәрен, уйҙарын, тел сараларын үҙенең маҡсатына, белеменә, кәйефенә, аралашыу шарттарына ярашлы ҡулланып, төрлөсә әйтә.

Күп уҡыусылар кәрәкле материалды һайлай белмәй, системаға һала алмай, шуға иншаларҙа фекер әйтеүҙә эҙмә-эҙлеклелек юғала, ҡабатлауҙар, бәйләнешһеҙ һөйләмдәр күҙәтелә. Был факттар текст төҙөү төбөндә ятҡан, коммуникатив аталған принципты махсус эшкәртеү, үҫтереү хаҡында һөйләй. Ниндәй һығымта эшләп була һуң?

- Бәйләнешле телмәр бала бәләкәй саҡта диалогтан монологҡа, ваҡиғалы телмәрҙән контекстлы телмәргә үҫешә. Бала был белемдәрҙе аралашыуҙа ғына түгел, ә планлаштырыу, эшмәкәрлек йүнәлтеү функцияһын да ҡуллана.
- Мәктәптә уҡыу барышында бәйләнешле телмәр артабан үҫеш ала: ул уҡыусылар тарафынан белем алыу, һаҡлау, таратыу функцияларында ҡулланыла. Бәйләнешле телмәр үҫеше уҡыусыларҙың төрлө стилдәге телмәр типтарын, төрлө әйтеү формаларын, коммуникатив аралашыуҙы үҙләштереүендә күренә.

**Тиҙәйткестәр әйттереү.** (5-6 класс дәреслектәре)

Сифатлы уҡырға өйрәтеү өсөн телмәр ағзаларының һығылмалылығына ирешеү мөһим роль уйнай. Шуға күрә телмәр аппаратын үҫтереү маҡсатында махсус күнегеүҙәр үткәреү отошло була. Был осраҡта тиҙәйткестәр телмәр аппаратын үҫтереү менән бер рәттән, уҡыусыларҙың һүҙлек запасын арттыра, телмәрҙе әҙер синтаксик берәмектәр менән байыҡтыра.

Шундай тиҙәйткестәр ҡулланыла:

*Өйҙәгеләрҙе өҙлөкһөҙ*
*Өйрәтә öләсәйем:*
*Өлкәндәр өгөт өләшә,*
*Өгөттәр өләшәйем!*
*Өлкәндәр өмөт өләшә-*
*Өмөттәр өләшәйем!*
*Сейәлектән сыҡҡан саҡта,*
*Сей сейә сәйнәй-сәйнәй,*
*Сикәләрем сатнар сиктә.*

*Һарыҡ һап-һоп баҫып, һыйырға һыйланырға килгән.*

*Һыйыр, һәлпелдәй - һәлпелдәй, һармаҡ һарыҡты һап-һары һалам менән һыйлаған.*

**Таҙа әйткестәр әйттереү.** Таҙа әйткестәр дәрестең лексик темаһына ярашлы ҡулланыла. Улар дәрестә өйрәнелгән өн-хәреф менән ижектәр уҡырға, дөрөҫ әйтергә күнектереү маҡсатында ҡулланыла. Тәүге осорҙа уҡытыусы ҡабатлатыу өсөн әҙер таҙа әйткестәр ҡулланһа, әкренләп уҡыусыларҙың үҙҙәрен дә таҙа әйткестәр төҙөүгә йәлеп итергә кәрәк.

Мәҫәлән, өн-хәрефтәрҙең дөрөҫ әйтелешен өйрәнгәндә түбәндәге таҙа әйткестәрҙе ҡулланыла:

*а) Сыҡ-сыҡ-сыҡ-Сыйыр-сыйыр сыйырсыҡ,*
*Сыҡ-сыҡ-сыҡ- Һиңә ҡуйҙым оясыҡ.*
*Сыҡ-сыҡ-сыҡ- Матур ғына сыйырсыҡ*
*Сыҡ-сыҡ-сыҡ-Ҡунаҡ булып тороп сыҡ.*
*б) Те-те-те, уҡыйым әкиәтте.*
*Тө-тө-тө,таҙа әйткесем бөттө.*

Мәҡәл һәм әйтемдәрҙе өйрәнгәндә уҡыусыларға ошондай ижади күнегеүҙәрҙе тәҡдим итәбеҙ:

1) Күп нөктәләр урынына кәрәкле һүҙҙәрҙе ҡуйып, мәҡәл һәм әйтемдәрҙе тултырығыҙ: Күрше хаҡы – (тәңре хаҡы). Бесәй моронон ҡаплап ятһа – (көн һыуыта).

Хәҙерге тормошҡа бәйләнгән теләһә ниндәй мәҡәл йә әйтемде тема итеп, кешеләрҙең эшмәкәрлеге, уҡыусылар тормошо тураһында хикәйәләр төҙөтөү. Мәҫәлән: Хеҙмәтенә күр хөрмәте һ.б.

2) Был бүлекте өйрәнгәндә өлкән быуын кешеләренән һорашып халыҡ ижады ҡормартҡылары яҙып килтереү эшен дә йөкмәтергә була. Балалар бигерәк тә таҡмаҡтар яҙып килтерергә ярата.

3) Программаға индерелгән әкиәттәрҙе өйрәнгәс, «Аманат», «Аҡбуҙат» журналдарын, «Йәншишмә» гәзитен балалар менән ентекләп уҡығас, уҡыусылар тарафынан ижад ителгән әкиәттәр менән танышыуҙы ла ҡулайлы тип таптыҡ. Аҙаҡ уҡыусыларҙа үҙҙәре лә әкиәт ижад итеп ҡарай.

4) Берәй ҙурырыҡ тема, әкиәт, мәҡәл, йомаҡ бүлектәрен йомғаҡлағанда кроссвордтар, башватҡыстар, шарадалар ҡулланабыҙ.

Һөйләү телмәрен үҫтереүҙә диалог ҙур урын алып тора. Бөтә лексик грамматик материал диалогтар һәм аралашыу ситуациялары аша үҙләштерелә. Диалог телмәрҙә киң таралған күнегеү – һорау-яуап күнегеүе.

**Телмәр үҫтереүҙә һүҙлек эше.** 5-6 кластарҙа һүҙлек өҫтөндә эш уҡыусыларҙы яңы һүҙҙәрҙең,өйрәнелгән һүҙҙең яңы мәғәнәләре менән таныштырыуҙан, лексик-фразеологик материалды бәйләнешле телмәрҙә дөрөҫ һәм урынлы ҡулланаырға өйрәтеүҙән тора. Һүҙлек өҫтөндә эшләү өсөн махсус дәрес бүленмәгән,шуның өсөн ул дәрестең төрлө этаптарында ойошторола. *Һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатыуға нигеҙләнгән күнегеүҙәр:* дәрес барышында һүҙҙең лексик мәғәнәләре төрлө юл менән аңлатыла:

1. Һүҙҙең логик билдәләмәһен биреү.
2. Һүҙҙең семантикаһын уларҙың синонимдарын килтереү менән дә аңлатырға мөмкин.
3. Мәғәнәләре аңлашылмаған һүҙҙәрҙе ҡайһы саҡта билдәле контекстҡа ҡуйыу ҙа етә.
4. Яңы һүҙҙең мәғәнәһен уларҙы уҡыусылар элек үҙләштергән һүҙҙәр менән сағыштырыу, морфемаларын анализлау алымы ла файҙаланыла.

Һүҙҙәрҙе ҡулланырға өйрәтеү күнегеүҙәре:

1. Һүҙҙәрҙе айырым билдәләренә ҡарап төркөмләү күнегеүҙәре (яңғыҙлыҡ исемдәрҙе айырып яҙыу-грамматик йүнәлеш, кешенең ыңғай сифатын айырып яҙыу-семантик принцип.)
2. Күнегеү тексындағы йәки әҙәби әҫәрҙәге һүҙҙәрҙең ҡулланылышын күҙәтеү.
3. Һүҙҙәрҙе синонимдары менән алмаштырыу күнегеүҙәре.
4. Бирелгән һүҙҙәр ярҙамында һөйләмдәрҙе тарҡауландырыу йәки ябайлаштырыу, тейешле конструкциялар төҙөү күнегеүҙәре.

Шулай итеп, уҡытыусы балаларҙың ижади һәләтен үҫтерерҙәй ниндәй генә алымды дәрестәрҙә ҡулланһа ла, был эш төрө балаларҙы ялҡытмаҫҡа, үҙенә тартып торорға, ҡыҙыҡһындырырға тейеш. Бары шунда ғына ул һәйбәт һөҙөмтә бирә һәм әһәмиәтле була. Был эш төрҙәре уҡыусының ижади фекер йөрөтөү һәләтен үҫтерергә, уның эске донъяһын байытырға ярҙам итә.

**Әҙәбиәт:**

Аҙнағолов Р., Аслаев Т.Х. Телмәр аралашыу мәҙәниәте. Өфө: Китап, 1989. 210 б.

Аҡдәүләтова З. Төрлө милләт балаларына башҡорт телен уҡытыу тәжрибәһенән // Башҡортостан уҡытыусыһы, 2006, №8. 26-сы б.

Акшина А.А. Структура целого текста. М: Просвещение, 1979. С.73.

Альмухаметов Р.В. О некоторых аспектах изучения башкирского языка в русскоязычных школах // Башкортостан укытыусыһы, 2001, №4. 7-се б.

Амангилдина Н. Башҡорт теле ҡытай теле түгел, теләһәң өйрәнергә була// «Башҡортостан» газетаһы, 2006, 1 сентябрь, №173. 4-се б.

Аслаев Т.Х. Башланғыс мәктәптә туған тел дәрестәрендә балаларҙың яҙыу телмәрен үҫтереү. Өфө. Китап, 1977. 280 б.

Башҡорт теленән программа. Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 1-11-се синыфтар өсөн. Өфө: Китап, 2003.

Ғарипова Ф. XX быуаттың 20-30-сы йылдарында башҡорт телен дәүләт теле сифатында ғәмәли ҡулланыуға индереү// «Ватандаш» журналы, 2004, №12. 53-сө б.

9. Ғәбдрахимова Л. Рус мәктәбендә балаларҙы телмәргә өйрәтеү тәжрибәһенән // Башкортостан укытыусыһы, 1997, №7. 18-се б.

**G. A. Nazarova**

*Municipal Budgetary General Educational Institution*
*secondary school villages*
*44 Sovetskaya str., Tatyr-Uzyak village, khaibullinsky district, Russia*
*E-mail: nga555@mail.ru*

## SPEECH IS THE BEING OF THE LANGUAGE

The article deals with the development of speech in the learning process. The problems of speech development of pupils, the main causes and solutions are highlighted. The author describes several types of work and tasks for use in the lessons of the Bashkir language for speech development.

*Keywords*: Bashkir language, the native language, speech, speech development, teaching.

## References

Aznagulov R., Aslaev T. H. The speech is a culture of communication. Ufa: Kitap, 1989. 210 p.

Akdavletova Z. The experience of teaching the Bashkir language to children of different nationalities. // “Teacher of Bashkortostan”, 2006 №8. P.20.

Akshina A. A. Structure of the whole text.- M.: Prosveschenie, 1979. P. 73.

Almukhametov R. V. Some aspects of the study of the Bashkir language in Russian-speaking schools // “Teacher of Bashkortostan”, 2001, №4. p.7.

Amangildina N. Bashkir is not Chinese, it can be learnt if desired // "Bashkortostan", 2006, 1 September, № 173. P.4.

Aslaev T.H. The development of written language of children in their native language lessons in primary school. Ufa. Kitap, 1977. P.280.

Program of the Bashkir language. For 1-11 grades of schools with education in Russian. Ufa: Kitap, 2003.

Garipova F. The use of the Bashkir language as the state language in the 20-30-ies of XX century // "Vatandash", 2004// №12. P.53.

Gabdrakhimova L. The experience of teaching speech to children in Russian schools // “Teacher of Bashkortostan”, 1997, № 7. P.18.